№1 МАХСУС СЫҒАРЫЛЫШ,
ФЕВРАЛЬ, 2025 ЙЫЛ



# ТУЛҠЫН

ҺӘР ТУЛҠЫНДА ДУҪЛЫҠ ХИСЕ ЙӘШӘЙ,
ҺӘР ТУЛҠЫНДА ҠОЯШ ТИРБӘЛӘ.
РӘШИТ НАЗАР

## Фирҙәүес Хисамитдинова — күренекле педагог, фән ҡаһарманы



Филология фәндәре докторы, профессор, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисамитдинованың тел ғилемен үҫтереүгә һәм башҡорт телен уҡытыуға индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Ул башҡорт теленең тарихын өйрәнеүгә, тикшереүгә, камиллаштырыуға күп көс һалған шәхес.

Үткән быуаттың икенсе яртыһы дөйөм төрки телдәрен һәм, шул иҫәптән, башҡорт телен өйрәнеүҙә, тел ғилемен әүҙем үҫеүҙә мөһим бер этап булып тора. Был тәү сиратта мәшһүр тел ғилеме белгестәренең үҫеп сығыуы, уларҙың исемдәре менән дә бәйле. Шундай белгестәрҙең береһе — профессор Хисамитдинова Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы. Башҡорт теленең тарихын тикшереүгә, үҫтереүгә, камиллаштырыуға, донъя кимәленә сығарыуға ҙур өлөш индергән талантлы ғалимә ул.

Бәләкәйҙән тырыш һәм ныҡышмалы ҡыҙ тыуған ауылынан утыҙ саҡрымда ятҡан Ташбулат ауылында белем ала. Артабан Белорет педагогия училищеһына, унан һуң Башҡорт дәүләт педагогия институтына уҡырға инә.

Төплө белемле ҡыҙ артабан бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ Мәскәүҙәге Тел ғилеме институтының аспирантураһына уҡырға ҡабул ителә. Ауырғазы районындағы Үтәймулла ауылында һигеҙ йыллыҡ мәктәпкә эшкә урынлаша, унда рус теле дәрестәрен алып бара. Артабан Өфөгә килеп, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эш башлай. 1980 йылда кандидатлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡлай.

1985 йылда Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисаметдинова үҙе тамамлаған Башҡорт дәүләт педагогия институты филология факультетының дөйөм һәм башҡорт тел ғилеме кафедраһында өлкән уҡытыусы булып эшләй башлай. 1987 йылда дөйөм кафедранан башҡорт филологияһы кафедраһы бүленеп сыға. Кафедра мөдире итеп филология фәндәре кандидаты, доцент Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисаметдинова тәғәйенләнә. Ул йылдарҙа башҡорт филологияһы кафедраһы филология факультетында «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле һәм әҙәбиәте», «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте» бүлектәрендә белгестәр әҙерләүҙә төп көстәрҙең береһе була, сөнки быға тиклем тик башҡорт, башҡорт-рус бүлеге генә эшләп килә.

90-сы йылдар башында Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Башҡорт дәүләт педагогия институтында башҡорт филологияһы факультетын булдырыу идеяһы менән яна һәм уны тормошҡа ашырыу өсөн күп көс һала. 1992 йылда факультет беренсе курсҡа башҡорт теле һәм әҙәбиәте, төрөк теле бүлегенә — 25, рус-башҡорт бүлегенә — 25, башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенә 25 кеше ҡабул итә. Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы Хисаметдинова алдына заман яңы һынауҙар, яңы бурыстар ҡуя: уға башҡорт филологияһы факультеты деканы вазифаһы йөкмәтелә.

Уҡыу процесын алып барыу өсөн ғилми дәрәжәле, талантлы, эшлекле, рухлы уҡытыусылар йәлеп итеү көнүҙәк мәсьәләгә әйләнә. Тәүге көндән студенттарға милли аң тәрбиәләү эшенә ҙур иғтибар бирелә. Илебеҙгә, халҡыбыҙға тоғро хеҙмәт итерлек шәхестәр тәрбиәләү бурысы ҡуйылған коллективта милли рух булдырыу өсөн тейешле шарттар кәрәк була.

1995-1998 йылдарҙа Ф.Ғ. Хисамитдинова Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры вазифаһын башҡара. Яуаплы вазифала эшләй башлағас, иң беренсе һәр районда булып, мәктәптәр менән танышып сыға, бәләкәй, иҫке, ҡараңғы һәм һыуыҡ ағас мәктәптәрҙең күп булыуына борсола. Үҙен борсоған һорауҙарын халыҡҡа, район һәм республика етәкселәренә еткерер өсөн, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында ошо проблемаларҙы күтәреп сығыш яһай.

1998 йылдан РФ Фәндәр академияһының Урал ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәте институтында директор урынбаҫары булып эш башлай. 2005-2016 йылдарҙа уның директоры, тел ғилеме бүлеге мөдире, 2016-2023 йылдарҙа — институттың ғилми етәксеһе була.

Тынғыһыҙ ғалимә йәмәғәт эшмәкәрлеге менән дә шөғөлләнергә ваҡыт таба. 1994-1999 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының беренсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтайҙың әүҙем депутаты була. 1996-2003 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының Ҡатын-ҡыҙҙары союзы рәйесе вазифаһын башҡара. БР Хөкүмәте ҡарамағындағы БР Дәүләт телдәре советы рәйесе, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) рәйесе урынбаҫары.

Ф.Ғ. Хисамитдинованың фәндә үҙ һуҡмағы, концепцияһы, үҙ ҡарашы булды. Ғалимә ана шундай үҙенсәлеге менән дә бөйөк һәм башҡа ҡатын-ҡыҙҙарға, уҡыусыларға өлгө.

Ысынлап та, Ф.Ғ. Хисамитдинова башҡорт тел ғилеменә зур яуаплылыҡ һәм намыҫ менән хеҙмәт итте, уға ярты быуат ғүмерен арнаны бай фәнни һәм методик мираҫ ҡалдырҙы. Ул — бик күп һанлы фәнни мәҡәләләр, дәреслектәр, уҡытыу программалары, һүҙлектәр-белешмәләр, монографиялар авторы. Хеҙмәттәрендә башҡорт тел ғилеменең бөтөнләй өйрәнелмәгән өлкәләрен яҡтыртты.

**Хәбибуллина З. Ә.,
ф. ф. к., доцент**

# Фирҙәүес Хисамитдинованың тормош юлы




– 1950 йылдың 1 ғинуарында Башҡорт АССР-ы Әбйәлил районы Рәхмәт ауылында тыуа
– 1970 йылда Белорет педагогия училищеһын тамамлай
– 1974 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының (хәҙер М.Аҡмулла исемендәге БДПУ) филология факультетын тамамлай, «Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы» һөнәрен ала, мәктәптә рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй
– 1976 йылда СССР Фәндәр академияһының Тел ғилеме институтына аспирантураға уҡырға инә
– 1978-1985 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре
– 1980 йылда «Тарихи яҡтыртыуҙа башҡорт теленең "сонор + һаңғырау шартлаулы" консонант өн ҡушылмалары» («Консонантные сочетания башкирского языка типа "сонорный + глухой смычный" в историческом освещении») темаһына кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай, фән кандидаты ғилми дәрәжәһенә эйә була
– 1985-1995 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтында эшләй
– 1987-1992 йылдарҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире
– 1992 йылда башҡорт филологияһы факультетын ойоштороуға күп көс һала, 1995 йылға тиклем башҡорт филологияһы факультетының деканы була
– 1993 йылда «Башҡорт теленең ойконимик системаһының формалашыуы» («Формирование ойконимической системы башкирского языка») темаһына докторлыҡ диссертацияһын яҡлай, фән докторы ғилми дәрәжәһенә эйә була, профессор дәрәжәһе бирелә
– 1994-1999 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының беренсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты
– 1995-1998 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы халыҡ мәғарифы министры
– 1996-1998 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһының Ҡатын-ҡыҙҙар союзы рәйесе
– 1998-2023 йылдарҙа Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй, 1998 йылдан — директор урынбаҫары, 2005 йылдан директор вазифаһын башҡара, 2005-2022 йылдарҙа — тел ғилеме бүлеге мөдире, 2016 йылдан — институттың ғилми етәксеһе
– 2000-2003 йылдарҙа Башҡортостандың Республикаһының Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе
– 2003 йылда «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була
– 2008 йылда «Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була
– 2014 йылда Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры
– 2020 йылда Салауат Юлаев ордены кавалеры
– 2023 йылдың 3 октябрендә Өфө ҡалаһында вафат була. Әбйәлил районының Рәхмәт ауылында ерләнә.




Хөрмәтле ир-егеттәр, һеҙҙе батырлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ байрамы — Ватанды һаҡлаусылар көнө менән ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ!

Бөгөн ҡыйыу, яуаплы, Тыуған илебеҙҙең тыныслығын һәм именлеген һаҡлаған, үҙенең хеҙмәте, белеме һәм һәләте менән уның сәскә атыуына, рухи үҫешенә ҙур өлөш индергән асыл ир-егеттәребеҙҙе хөрмәтләйбеҙ, данлайбыҙ! Һеҙ — ил, ғаилә таянысы, мәғрүр ҡаялай ел-ямғырҙан яҡлаусы ышаныслы ҡалҡаныбыҙ.

Бөркөттө осоуынан, егетте эшенән таныйҙар. Ҡәҙерле көслө заттар, һеҙҙең физаҡәр хеҙмәтегеҙ, тәрән аҡылығыҙҙы дөрөҫ йүнәлештә эшкә егеп, факультетыбыҙ өсөн тырышыуығыҙ оло хөрмәткә һәм маҡтауға лайыҡ.

Ҡәҙерле ир-егеттәр, һеҙ булғанда беҙҙең киләсәгебеҙ яҡты, ышаныслы!

Сәләмәтлек, күңел тыныслығы һеҙҙең пар атығыҙ, бәхет, уңыштар ғүмерлек юлдашығыҙ булһын, тормош йырығыҙ һәр ваҡыт гөрләп торһон, яҡындарығыҙҙың һөйөүенә кинәнеп йәшәргә лә йәшәргә булһын!

*«Тулҡын»дар*















# “Тулҡын”дар ижады

## Йә ғүмер!

Йә ғүмер, залим ғүмер,
Йән фани тәнемә өр!
Йә моңһоу минең күңел,
Гәлсәр шишмәләй түгел!

Киләсәккә һин ҡара,
Үҙ-үҙеңдән һин һора:
"Заманың һинең ҡайҙа?
Үҙ-үҙеңә ни файҙа?"

Ут-нурың алда булһын,
Һинең тормошоң ысын.
Ғәйрәт бирәсәк вәһем,
Ҡәүәтле тауҙарға мен.

Бер ваҡыт атасаҡ таң,
Аҡ пәрҙәһеҙ булыр аң,
Киләсәк һиңә уңыш,
Нурланасаҡһың һин йыш!

*22 ғинуар 2022 йыл*
*Нуров Алмаз ,*
*1 –се курс студенты*

## Иҫтә

*Өләсәйем Фатима Алсынбаеваға*
*бағышлайым*

Ҡала мәшәҡәтенән арынырға
Ҡайттыҡ әле һатлыҡ ауылына
Атай, әсәй йөрөгән урамдарҙан
Выжлап үттек тимер аттарҙа.

Ҡаршы алды ауыл урамдары ,
Әсәйемдең тыуған нигеҙе...
Ҡаршы сыҡмай беҙгә өләсәйем
Ҡаршылай тик бикле ишеге.

Тоямын мин өләсәйҙең «есен»
Өй ишеген асып ингәнемдә,
Өләсәйемдең йылы ҡулдары
Ҡағылғандай була иңдәремә.

Мәңге тынмаҫ кеүек еҙ самауыр
Ҡаршыламай өҫтәл түрендә.
Көтөп тормай тәмле бәлештәр ҙә...
Һағыныу хисе әрней күңелдә.

Фотоһүрәттәргә һөйөп бағам,
Тупһа аша атлап керәм дә
Көткән кеүе мине киң боландар
Эленеп торған иҫке келәмдә.

Стенalағы сәғәт тынып ҡалған,
Гүйә, бында ваҡыт туҡтаған...
Һәр бер һүрәт хәтирәләр һүтә,
Өләсәйем йәндәй һаҡлаған.

Һағындыра өҙөлөп өләсәйем,
Өләсәйгә килә һыйынаһым.
Тик бер генә наҙлы ҡосағында
Йылынаһым килә, йылынаһым.

*Зөлфиә Абдуллина,*
*1-се курс студенты*

М. АКМУЛЛА ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ ПЕДАГОГИЯ УНИВЕРСИТЕТЫ
БАШҠОРТ ФИЛОЛОГИЯҺЫ ФАКУЛЬТЕТЫ ГӘЗИТЕ

БАШ МӨХӘРРИР:
НУРОВ АЛМАЗ, 1-СЕ КУРС СТУДЕНТЫ
ЯУАПЛЫ МӨХӘРРИР;
ХОҘАЙБИРГӘНОВА ГӨЛНАЗ, 3-СӨ КУРС СТУДЕНТЫ